# Студенттарға үҙ аллы эштәрҙе башҡарыу өсөн методик кәңәштәр

Әҙерләне: башҡорт теле уҡытыусыһы Кәримова Г.Я.

**Туймазы, 2010**

Рассмотрено и утверждено на заседаниии ПЦК филологических дисциплин

Протокол. **№ 5 от «7 » декабря 2009 г.**

Одобрено на заседании методического совета ГОУ СПО «ТПК»

Протокол. **№ 20 от « 5» января 2010 г**

Учебно-методический комплекс составлен:

Каримовой Г.Я.., преподавателем башкирской литературы

Составитель: Каримова Г. Я., преподаватель башкирского языка и литературы
Рецензенты: Фатихова З. С., преподаватель башкирского языка и литературы высшей категории ГОУ СПО ТПК
Нагимова Н. Г., преподаватель башкирского языка и литературы МБОУ СОШ С с. Ярмухаметово

Йөкмәткеһе

Инеш........................................................................................3
**I бүлек Үҙ аллы эштәрҙе башҡарыу буйынса методик кәңәштәр. Бер нисә предмет өсөн уртаҡ үҙ аллы эштәр**
1.1. Фәнни хеҙмәттәр менән эшләү. План, цитата, тезис, конспект, аннотация..............................................................................4
1.2. Рецензия, доклад, реферат яҙыу.......................................5
1.3. Ғилми тикшеренеү эштәрен башҡарыу............................9
1.4. Библиография төҙөү.........................................................15
1.5. Инша яҙыу.........................................................................17
1.6. Публицистик характерҙағы иншалар...............................19
1.7. Схема, таблицалар төҙөү...................................................22
1.8. Проект һәм презентациялар әҙерләү.................................23

**II бүлек Предмет буйынса башҡарылған үҙ аллы эштәр**
2.1. Башҡорт теленән анализ төрҙәре......................................28
2.2. Тасуири уҡыу һәм уны уҡытыу предметы буйынса бирелгән эштәрҙе башҡарыуға бәйле кәңәштәр...........................31
**Әҙәбиәт**........................................................................................35

# Инеш

Студенттарҙың үҙ аллы эшмәкәрлеге – уkытыусының туранан тура kатнаш булмаған, әллә унының биреме буйынса юғары кимәлдә үҙаллылыk талап иткән уkыу һәм танып белеү эшмәкәрлегененең ойоштороу формаһы.

Башkорт теле, әҙәбиәт, балалар әҙәбиәте һ.б. предметтар буйынса үҙ аллы эштәрҙе ойоштороуҙың бурыстары түбәндәгеләр:

- студенттарҙың теоретик белемен һәм практик күнекмәләрен нығытыу, системаға индереү;
- теоретик белемде тәрәнәйтеү;
- студенттарҙың ижади һәләттәрен, активлығын, танып белеү эшмәкәрлеген үҫтереү;
- kуйылған бурыстарҙы тормошkа ашырыр өсөн уkытыусыға кәрәкле ныkышмалылыk, яуаплылыk, үҙаллылыk һ.б. сифаттарҙы тәрбиәләү;
- тикшеренеү эштәренә йәлеп итеү.

Аудиториянан тыш үҙаллы эштәр уkыу планы буйынkса һәр предметkа бүленгән мәжбүри йөкләмә ваkытының 29-32 % тәшкил итә.

Тәkдим ителгән хеҙмәткә бер нисә предмет өсөн уртаk үҙ аллы эштәр менән бер рәттән тиң һәр предметkа хас эштәр ҙә күрһәтелде.

Тәүгеһенә беҙ түбәндәгеләрҙе индерәбеҙ.

1. Фәнни эштәргә бәйле үҙаллы эштәр (тезис, план конспект яҙыу, цитата килтереү, аннотация төҙөү).
2. Фәнни жанрҙа эштәр башkарыу (рецензия, доклад, реферат, фәнни-тикшеренеү эше)
3. Тема буйынса библиография төҙөү.
4. Схема, таблицалар эшләү.
5. Проекттар, ижади эштәр башkарыу.
6. Инша яҙыу.

Икенсе бүлектә бирелгән кәңәштәр башkорт теленә, тасуири уkыуға бәйле.

Хеҙмәт өсөнсө, дүртенсе, бишенсе курстарҙа уkыусы студенттарға тәғәйенләнә. Үҙ аллы эштәрҙе башkарғанда улар был кәңәштәргә таяна алалар.

## I бүлек. Үҙ аллы эштәрҙе башҡарыу буйынса методик кәңәштәр.
## 1.1. Бер нисә предмет өсөн уртаҡ үҙ аллы эштәр. Фәнни хеҙмәттәр менән эшләү. Конспект, Тезис, План, Аннотация.

*План* – текстың «һөлдәһе». Унда материалдың ҡыҫҡаса эҙмә-эҙлеге бирелә. План пункттарында текстың бүлектәре (өлөштәре, абзацтары) исемдәре яҙыла. Һәр пунктҡа исем һайлау – ҡатмарлы процесс. Унда абзацтың, текст өлөшөнөң төп йөкмәткеһе, фекере еткерелә. Уңышлы төҙөлгән план кешенең текст анализлай белеүен күрһәтә. План яҙыр өсөн абзацтың сиктәрен билдәләргә, унының төп фекерен асыҡларға, ошо фекерҙе еткерерҙәй пункт өсөн һөйләм уйларға кәрәк. Ул хәбәр, һорау, Iсоставлы атама һөйләм, цитата формаһында килә ала.

*Конспект* – берәй текстың ҡыҫҡа яҙма эстәлеге. Уҡыу процесында конспектлауҙың маҡсаты – уҡылғанды ҡыҫҡартып яҙыу. Бының өсөн төп мәғлүмәтте тотҡан һөйләмдәр генә айырып яҙып алына. Конспекттарҙы шартлы рәүештә 3 төргә бүлеп йөрөтәләр: текстуаль, ирекле, тематик. Текстуаль конспекттарҙа китап, мәҡәләләрҙән материалдар һүҙмә-һүҙ яҙып алына. Ирекле төрө цитаталар, тезистар аша текст йөкмәткеһе еткерелә. Тематик конспектта бер нисә сығанаҡтар бер тема буйынса материалдар туплана. Конспектлау текст йөкмәткеһен аңлы ҡабул итеү менән тығыҙ бәйле. Тексты конспектлау эҙмә-эҙлеге:

- китап хаҡында белешмә яҙыла (авторы, хеҙмәттең исеме, ҡайһы журналдан алынған һ.б.)
- хеҙмәтте уҡыу, йөкмәткеһе менән танышыу;
- аңлайышһыҙ һүҙҙәрҙең мәғәнәһен асыҡлау;
- план төҙөү;
- план буйынса текстың йөкмәткеһен еткереү.

Уҡылғанды схематик рәүештә яҙырға мөмкин. Ул *конспект-схема* тип атала.

*Тезис* – докладтың, лекцияның төп фекерен эсенә алған ҡыҫҡаҫа яҙма. Тезистар конспекттан шуныһы менән айырыла:

- уҡылған материал ҡыҫҡа формулировка аша еткерелә;
- тезистар әйтелгәнгә йомғаҡ яһай.

Тезиста йә фекер раҫлана йә инҡар ителә. Һәр тезиста ниндәй ҙә булһа фекер еткерелә. Тезистарҙы яҙыу барышы план төҙөүгә оҡшаш. Текстың төп фекере абзац сиктәрендә бирелә. Бер мәҡәләне 2-3 абзац аша еткерергә мөмкин. Тезистар текстың төп

фекерен генә еткереп калмай, унда нимәлер раçлана, иçбатлана. Тезистар яҙғанда, миçалдар, факттар килтерелмәй. Шулай итеп, планда мәкәләләге мәғлүмәт һанала, конспектта йөкмәтке еткерелә. Тезис аша текстың төп фекере еткерелә.

*Цитата* – текстан һүҙмә-һүҙ килтерелгән өҙөк. Фәнни хеҙмәттәрҙә, бигерәк тә теоретик өлөштәрендә, цитаталар күп кулланыла. Ғәҙәттә, автор үҙ фекеренең дөрөçлөгөн раçлар нығытыр өсөн, цитаталарҙы килтерә. Цитатала автор һүҙҙәре, ғәҙәттә, нисек бар, шулай бирелә. Цитаталар тырнактар эсенә алына һәм һылтанма яһала. Әгәр ҙә текстың бер өлөшө төшөп калдырылһа, уның урынына күп нөктәләр куйыла. Цитаталарҙың авторы, сығанағы, күрһәтелә. Был сығанактан алынған өҙөктәр бер нисәү булһа, икенсеһендә, өсөнсөһөндә сығанактың бите генә күрһәтелә һәм «шунда ук» һүҙе яҙыла. Былар бөтәһе лә йәйә эсендә цитатанан һуң яҙыла.

Һуңғы осорҙа цитатаның сығанактарын шакмак йәйәләрҙә цифрҙар менән дә бирәләр. [4-се бит]. 1-се цифр фәнни хеҙмәттең аҙағында бирелгән библиографиялағы исемлектә 4-се булып тороуын күрһәтә? 2-се (5) цифр – цитата алынған бит һаны.

*Аннотация* – китаптың йәки мәкәләнең йөкмәткеһенә бирелгән кыçка характеристика. Был аңлатмала шулай ук китаптың тәғәйенләнеше хакында ла әйтелә. Кулына яңы китап алған һәр кем иң башта шул аңлатманы укып карай. Аннотация тексы кыçкалығы, аныклығы һәм эмоциональлеге менән айырылып тора. Аннотация композицияһы түбәндәгесә:

а) китап хакында мәғлүмәтÇ
б) уның кыçка йөкмәткеһе;
в) тәғәйенләнеше.

Аннотация төҙөгәндә, ошондай һөйләмдәрҙе кулланырға мөмкин. Хеҙмәттә кеүек мәсьәләләр яктырыла (анализлана, өйрәнелә). Автор түбәндәге проблемаларҙы тикшерә... Хеҙмәт ....хакында мәғлүмәт еткерә. Айырыуса ... иғтибар итә: иçбатлай һ.б.

## 1.2. Доклад, рецензия, реферат яҙыу

*Доклад* – билдәле бер темаға халык алдында һөйләгән телмәр.

Доклад жанры фәнни телмәрҙең һөйләү формаһына караһа ла, уны яҙма рәүештә әҙерләйҙәр. Доклад тексының стандарт моделе

була. Уны яҙыуға бер нисә сығанаҡты файҙаланалар. Башҡа фәнни хеҙмәттәр кеүек үк доклад инеш, төп һәм йомғаҡлау өлөштәренән тора. Теманы билдәләгәндән һуң? студент әҙәбиәт менән таныша, кәрәкле мәғлүмәтте конспект формаһында теркәп бара. Унда хеҙмәт хаҡында библиографик белешмә лә яҙыла.

Унан материал системаға индерелә. Текст өлөштәре араһында мәғәнәүи бәйләнешкә иғтибар ителә. Докладҡа әҙерлекте түбәндәге схемала күрһәтергә мөмкин:




*Рецензия* – әҫәргә, фәнни хеҙмәткә баһа биреп яҙылған мәҡәлә йәғни баһалама. Уның нигеҙендә әҙәби әҫәрҙең йөкмәткеһен, художество эшләнешен анализлау һәм үҙ мөнәсәбәтенде белдереү ята. Был ижади эш рецензенттан ҙур оҫталыҡ, белем һәм күнекмә талап итә. Әҙәбиәт теорияһынан һәм ғилеменән белем етерлек булмаһа, рецензия яҙыу килеп сыҡмаясаҡ. Әгәр рецензия әҙәби әҫәргә һәм уның проблемаларына арнала икән, художестволы әҙәбиәттең жанр үҙенсәлектәрен (композицион төҙөлөшө, образдар системаһы, тел-стиль һәм һүрәтләү саралары һ.б.) белеү мотлаҡ.

Рецензияла авторҙың уҡыған, ишеткән, күргән материалға

эмоциональ баһаһы көслөрәк бирелә. Дәлилдәр менән нығытылған үҙ аллы фекере өҫтөнлөк итә.

Укылған хеҙмәткә баһа ыңғай һәм кире булыуы мөмкин. Автор баһаламала башта ыңғай яktарҙы миҫалдар менән нығытып, аҙаk кәмселектәрҙе күрһәтә, тәkдимдәр, кәңәштәр яҙа ала. Рецензия яҙыуҙың максаты, бер яktан, яҙыусы хеҙмәтенә баһа биреү булһа, икенсе яktан, яңы әҫәрҙе пропагандалау тора.

Рецензияның төҙөлөшө төрлөсә булырға мөмкин. О.К.Кудасова билдәләүенсә, фәнни тексkа рецензия 2 композицион өлөштән тора: мәғлүмәти һәм баһа биреүсе. Беренсе өлөштә текста kаралған проблемалар хәбәр ителә, хезмәттең төҙөлөшө, йөкмәткеһе менән таныштыра. Икенсе өлөшөндә авторҙың субъектив kарашы еткерелә. Рецензия композицияһы:

I Инеш (Хеҙмәт, китап авторы хаkында мәғлүмәт, библиографик һүрәтләү)

II Төп өлөш.

1. Хеҙмәттә күтәрелгән мәсьәләләр яktыртыла.
2. Мөһим һорауҙары анализлана.

III Хеҙмәттең әһәмиәте хаkында дөйөм һығымта.

*Укылған әҫәргә рецензия яҙыу тәртибе*

*ә. Әҫҫәрҙе иғтибар менән уkып сығығыҙ. Кәрәк булһа, айырым өлөштәрен kабаттан уkығыҙ.*

*ө. Темаһын һәм төп фекерен билдәләгеҙ.*

*һ. Әҫәрҙә күтәрелгән проблемалар, уларҙың бөгөнгө көн менән ауаздашлығы тураһында яҙығыҙ.*

*ҫ. Образдар системаһына һәм уларҙың характер үҙенсәлектәренә баһа бирегеҙ.*

*ң. Авторҙың тел-стиль оҫталығына, персонаждарҙың телмәренә иғтибар итегеҙ.*

*k. Авторҙың үҙе һүрәтләгән хәл-вakиғаларға һәм геройҙарға мөнәсәбәтен асыkлағыҙ.*

*ғ. Укыусыға йөгонтоһо, рухи үҫҫешенә тәьҫире тураһында уйланығыҙ.*

*ҙ.Әҙәби кимәле һәм kиммәтенә баһа бирегеҙ.*

Күреүебеҙсә, рецензия – kатмарлы жанр. Шуға күрә рецензент үҙе тикшергән хеҙмәт проблемалары буйынса компетентлы булырға, рецензия тексын төҙөй белергә тейеш.

*Реферат* - 1. ғилми хеҙмәттең, китаптың һ.б. хеҙмәттең kыҫkа йөкмәткеһе һөйләп йәки яҙып бирелгән эш. 2. Әҙәби һәм башkа

сығанаҡтарҙы күҙәтеүгә нигеҙләнеп киң таралған төрө һанала.

Реферат «объект - субъект – объект» моделенә ярашлы төҙөлә. Бында объект булып текст тора, реферат өҫтөндә эшләүсе субъект һанала. Рефератҡа объективлыҡ, факттарҙың теүәллеге, аныҡлығы, ҡыҫҡалыҡ хас. Реферат яҙыусының субъектив фекерҙәренә юл ҡуйылмай. Рефератты яҙғанда бөтәһенә лә билдәле, әһәмиәте булмаған текст өлөштәре төшөрөп ҡалдырыла, яңы, актуаль, мөһим фекерҙе тотҡан урындары алына. Тексттың өлөштәре бер-береһенә бәйле булырға, фекер эҙмә-эҙлекле үҫтерелергә тейеш. Рефераттың структураһы: титул бите, инеш өлөш, төп өлөш, йомғаҡлау, әҙәбиәт исемлеге. Инеш өлөштә проблема билдәләнә, уның актуаллеге, тикшереү маҡсаты, бурыстар асыҡлана. Был өлөш 1-2 биттән торорға мөмкин. Төп өлөш бер-нисә параграфтан тора. Уларҙа вағыраҡ мәсьәләләр ҡарала. Төп өлөштә тикшеренеү һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәт, уларға анализ, факттар яҡтыртыла. Алынған мәғлүмәт иҫбатлана, аргументтар килтерелә, схема, таблицалар файҙаланыла.

Йомғаҡлау өлөшөндә өйрәнелгән проблеманың әһәмиәте перспективалары еткерелә.

*Реферат төҙөүҙең алгоритмы.*

1. *Фәнни сығанаҡтың авторын, исемен һ.б. библиографик белешмәләрҙе яҙығыҙ.*
2. *Тексты уҡығыҙ. Абзацтарға бүлегеҙ. Һәр абзацтың нимә тураһында икәнлеген билдәләгеҙ*
3. *Логик план төҙөгөҙ.*

*һәр абзацта төп фекерҙе тотҡан өлөштәрен планға ярашлы яҙып барығыҙ.*

1. *Текст фрагменттарын ҡыҫҡартҡанда төрлө алымдар ҡулланығыҙ (дөйөмләштерегеҙ, төп фекерҙе тотҡан өлөштәрен алып кәркәмәгәндәрен төшөрөп ҡалдырығыҙ, перефраза яһағыҙ һ.б.)*
2. *Реферат тексын уҡығыҙ, редакторлағыҙ. Рефератта түбәндәге һөйләмдәрҙе ҡулланырға тәҡдим итәбеҙ: мәҡәлә түбәндәге һорауҙарҙы яҡтырта...; хеҙмәттә түбәндәге проблема тикшерелә; .....хаҡында мәғлүмәт еткерелә; автор... иҫбатлай (күрһәтә, нигеҙләй, еткерә, тәнҡитләй, өйрәнә); тикшеренеүҙең фәнни әһәмиәте шунда...; алынған мәғлүмәт беҙгә... кеүек мәсьәләләрҙе хәл итергә булышлыҡ итә.*

Ҡайһы бер ғалимдар, реферат яҙыусы сит телмәрҙе еткерә

белеү күнекмәһенә эйә булырға тейеш, тип иҫәпләй. Быға ирешеү алымдары итеп улар түбәндәгеләрҙе күрһәтә:

Фәнни хеҙмәттең дөйөм тематикаһын һүрәтләү (автор мәҡәләлә ... тураһында яҙа. Мәҡәлә түбәндәге мәсьәләләр тикшерелә ... Проблеманың актуаллеге шунда...)

Автор уй-фекерҙәре эҙенән барырға мөмкин. (Хеҙмәт... өлөштән тора. Тәүге өлөшөндә автор ... хаҡында яҙа, бәйән итә, мәғлүмәт еткерә. Бигерәк тә авторҙы түбәндәге мәсьәләләргә туҡтала ... Йомғаҡлау өлөшөндә автор ... тураһында һүҙ алып бара)

Авторҙың ҡарашы үҙенсәлектәре хаҡында һүҙ йөрөтөлә. (Автор... тураһында дискуссия ҡора ... тезисының ғәҙеллеген иҫбатлай. Автор шундай билдәләмә бирә ... Автор шундай һығымтаға килә ...)

Ҡайһы бер ғалимдарҙың фекеренсә, уҡыусылар, студенттар реферат менән тикшеренеү эшен бутайҙар. Бигерәк тә рефератты фәнни-тикшеренеү эше тип атаусылар бар.

Реферат яҙғанда, студент бер йәки бер нисә сығанаҡта үҙен ҡыҙыҡһындырған проблеманың, мәсьәләнең нисек яҡтыртылыуын еткерә. Уның субъектив фекерҙәре реферат һығымтаһында ғына бирелергә мөмкин. Ә тикшеренеү эшендә сығанаҡтарҙы өйрәнеп, сағыштырып, анализлап, ниндәйҙер яңы һөҙөмтәләргә ирешеү күҙаллана.

Рефератты яҡлау өсөн 5-7 минут ваҡыт бирелә. Баһалағанда түбәндәгеләргә иғтибар ителә;

- эштең йөкмәткеhе (теманың мөһимлелеге, актуаллеге, проблема ҡуя белеү, рефераттың структураһы);
- фәнни эштең биҙәлеше, тышҡы күренеше;
- рефератты яҡлауҙа уҡыусының үҙен-үҙе тотошо, материалды белеүе, һорауҙарға яуап бирә алыуы иҫәпкә алына.

## 1.3. Ғилми-тикшеренеү эштәрен башҡарыу

*Ғилми-тикшеренеү эше этаптары.*

I этап. Әҙерлек этабы. Тикшеренеү өлкәһе асыҡлана. Эш планы төҙөлә, тема билдәләнә. Төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәт туплана. Текстан өҙөктәр, библиографик мәғлүмәт, иллюстрациялар, цитаталар яҙыла.

II этап. Фәнни тикшеренеү эшенең структураһы билдәләнә,

маkсат, бурыстар, тикшереү объекты, предметы асыkлана. Былар тураһында инеш өлөштә яҙыла.

III этапта проблема буйынса йыйылған материалға байkау яһала, төп өлөшө яҙыла.

IV Йомғаkлау этабы. Һөҙөмтәләр сығарыла, һығымта яһала.

*Фәнни тикшеренеү эшенең планын төҙөү*

Фәнни-тикшеренеү эшен башламаç элек уның якынса планын төҙөргә кәрәк, сөнки был план тикшереү барышында бер нисә тапkыр үҙгәрә, теүәлләнә, камиллаштырыла.

План төҙөгәндә "Тикшерә торған мәсьәләне асыkлау өсөн нимәләр эшләргә кәрәк?" тигәк һорауға яуап эҙләнә. Түбәндәге методтар, эш төрҙәрен kарап сығыу пландың эҙмә-эҙлелеген, күләмен билдәләгәндә ярҙам итәсәк.

а) Үҙ алдыңа уйлау, фекер йөрөтөү. Моғайын, бөтә ғилми эҙләнеүҙәр эше лә үҙҙ алдыңа уйланыуҙан башланалыр. Был тема тураһында мин нәмә беләм? Ниндәй фекерҙәр әйтә алам? Белгәндәремдән сығып, ниндәй һығымта яһарға булаҒ Ошондайырак һорауҙарға яуап биреү артабанғы эште билдәләргә ярҙам итә.

б) Тикшереләсәк тема буйынса китаптар, мәkәләләр менән танышыу.

- Быға тиклем был тема буйынса нимәләр яҙылған?
- Ниндәй аспекттары тикшерелгән?
- Нимәләр әле kаралмаған?

Һорауҙарыңа яуапты белешмә китаптарҙан, энциклопедияларҙан эшләй башларға кәрәк. Айырым фекерҙәрҙе, фараз итеүҙәрҙәрҙе, иçбатлауҙарҙы яҙып kуйыу ҙа файҙалы буласаk, сығанаkkа һылтанма биреү ҙә шарт.

в) Кино-телефильмдар kарау.

Фәнни, фәнни-популяр һәм художестволы фильмдарҙан да kыҙыkлы мәғлүмәт алып була. Уларҙан тема буйынса ниндәй яңылыk алыуығыҙҙы теркәп kуйырға кәрәк.

г) Компьютер селтәренән, Интернеттан мәғлүмәт алыу. Бөгөнгө фәнни-тикшеренеү эштәрен компьютерҙан башkа күҙҙ алдына ла килтереп булмай. Kуллана белгән кешегә компьютер селтәренән барлыk мәғлүмәтте лә табып була. Яңы материалды билдәләп, теркәп kуйыу якшы.

д) Кешеләрҙән һорашыу, интервью алыу

Тикшереү предметы тураһында төрлө кешеләр менән осрашып

һөйләшеү ҙә эш барышына асыҡлыҡ индерергә, ҡыҙыҡлы мәғлүмәт табырға ярҙам итеүе мөмкин. Белгестәр (юғары уҡыу йортонда эшләгән ғалимдар, ғилми-тикшеренеү институты хеҙмәткәрҙәре, укытыусылар) йәки үҙ тәжрибәһендә һеҙҙең темағыҙға яҡын берәй һынау үткәреп ҡараған (белгес булмаған) кешеләр менән һөйләшеү, интервью алыу, әңгәмә ниндәй ҙә булһа яңы мәғлүмәт өҫтәйәсәк. Быларбөтәһе лә теркәлеп бара.

е) Күҙәтеү

Тикшереү объектын күҙҙәтеү мөмкинлеге булһа, мотлаҡ файҙаланырға кәрәк. Күҙҙәтеү нигеҙендә алынған мәғлүмәттә яҙыла

„Ошо методтарҙың ҡайһыһы тикшеренеү эше барышында ниндәй әҙҙмә-эҙлелектән ҡулланыла, шунан сығып эш планы төҙөлә.

Уңышлы план - яҡшы эштең нигеҙе. Планды Өдөйөмдән-айырымға, абстракттан - конкреткаӨ шкалаһы буйынса төҙҙәргә, кәрәк булһа, пландағы пункттарҙың урындарын күсерергә, үҙгәрештәр индерергә була. Шулай итеп, план - ғилми - тикшеренеү эше башҡарыусының эш ҡоралы.

*Фәнни әҙәбиәт өҫтөндә эш.* Фәнни әҙәбиәт өҫтөндә эшләй белеү ҙә бик мөһим, сөнки тема буйынса йыйылған әҙҙәбиәттән иң кәрәкле урынын үҙ фекерендә дәлилләү, раҫлау өсөн, йә булмаһа быға тиклем булған фекерҙәрҙе инҡар итеү өсөн ҡуллана белеү - ҡатмарлы эш. Был эште түбәндәгесә ойошторорға кәрәкҠ

а) әҙәби сығанаҡты дөйөм рәүештә ҡарап сығырға, йөкмәткеһенә иғтибар итергә, файҙаланылған әҙәбиәт исемлегенә күҙ һалырға, иң мөһим тип иҫәпләгән тексты билдәләргәҪ

б) мөһим тип һаналған тексты яңынан уҡып сығырға, унын планын төҙөп, кәрәкле урындарын яҙып ҡуйырға;

в) башҡа әҙәби сығанаҡтарҙан яҙылып алынған фекерҙәрҙе, иҫбатлауҙарҙы сағыштырып ҡарарға, уртаҡ һәм айырмалы яҡтарҙы билдәләргә.

г) бөтә йыйылған материалды тәнҡит күҙлегенән ҡарап сығып, үҙ фекереңде булдырыу (формалаштырыу);

д) эксперимент (тәжрибә) үткәреү.

Тәжрибә методы хәҙҙер күп фәндәр буйынса төп метод булып иҫәпләнә. Тәжрибә нигеҙендә фараздар йә иҫбатлана, йә кире ҡағыла.

*Материалды тәртипкә килтереү, ғилми-тикшеренеү эшен әҙерләү.* Йыйылған материал һәр саҡ саманан тыш күп була.

Материалдың кәрәгенән тыш күплеге уны системалаштырыу һәм һайлау этабында, иң кәрәклеһен һәм икенсе дәрәжәләгеһен айырып алғанда, мөһимен һәм мөһим булмағанын билдәләгәндә беленә.

Ғилми-тикшеренеү эшен әҙерләүҙең үҙ тәртибе бар.

Алда билдәләнгәнсә, һәр фәнни хеҙмәттә, ғәҙәттә, инеш, төп һәм йомғаклау өлөшө була.

Инеш өлөштә проблеманың актуаллеге, тикшеренеү объекты, предметы билдәләнә. Артабан тикшеренеү маҡсаты һәм бурыстары ҡуйыла.

*Тикшеренеү объекты* - тикшеренеү, өйрәнеү өсөн алынған процесс йәки күренеш, ә *тикшереү предметы* - нимә тикшерелә, нимә өйрәнелә шул була. Икенсе төрлө әйткәндә, фәнни эш нимәгә бағышлана (темала ниндәй проблеманың хәл ителеше ҡуйыла) - шул тикшеренеү предметы тип атала.

Маҡсат, бурыстарҙы билдәләү өсөн ауыр мәсьәлә. Шуға был төшөнсәләрҙе лә асыҡлап китәйек. Тикшеренеү эшенең маҡсаты йыйнаҡ, аныҡ булырға тейеш.

*Маҡсатты билдәләгәндә,* "иҫбатлау”,"нигеҙләү", "эшләү" кеүек һүҙҙәр ҡулланыла. "Эшләү" һүҙе, мәҫәлән, видеофильм, макет, модель, компьютер программаһы эшләү кеүек маҡсат ҡуйғанда ҡулланыла.

*Бурыстарҙы асыҡлағанда,* "анализлау", "асыҡлау", "билдәләү" кеүек һүҙҙҙәр күберәк ҡулланыла. Бурыстар 4-5-тән артмаҫҡа тейеш.

Бурыстарҙан сығып, тикшеренеү методтары, методика билдәләнә. Улар - күҙәтеү, анализ, синтез, сағыштырыу, интервью, анкета алыу, тарихи метод һәм башҡалар.

Төп өлөштә тикшерелгән проблема буйынса сығанаҡтарға байҡау яһала (кемдәр, ҡасан, нисек был мәсьәләне тикшергән) һәм был эштә нимә тикшерелеүе, нимәләр эшләнеүе тасуирлана.

Йомғаклау өлөшәндә алдағы билдәләнгән бурыстарҙың нимәләр һөҙөмтәһендә хәл ителеүе хәбәр ителә.

Һығымталар ҡуйылған маҡсатка ирешеү-ирөшмәүҙҙе сағылдырырға тейеш. Шуға ла йомғаҡлауҙа "тикшеренеү һөҙөмтәһендә ... асыҡланды," "...иҫбатланды","... эшләнде" кеүек һығымта сығарыла.

Шулай итеп, фәнни эш менән шөғөлләнеүҙҙә маҡсат, бурыстар, һөҙөмтә, һығымта, тикшереү тәртибе, методтар үҙ-ара

логик бәйләнештә була һәм яҙғанда ла билдәле бер тәртиптә бирелә.

*Фәнни хеҙмәтте әҙерләүгә дөйөм талаптар*

1. Уkыусылырҙың ғилми-тикшеренеү эше 5 биттән 15 биткә тиклем күләмдә, ә доклад - 1-5 бит самаһы була.

2. Компьютерға башkарылған эшкә талаптар:

- шрифт ҙурлығы - 12-14, Times New Roman (йәки икенсе шрифт булырға мөмкин);
- юл араһында интервал – 1,5-2;
- һулдан - 30 мм, уңдан - 15мм, өҫтән - 20мм, аҫтан -20 мм буш урын kалырға тейеш.
- бер биттә 30 юл, юлда 60 билдә (тыныш билдәләрен һәм һүҙҙҙәр араһындағы аралыkты ла иҫәпкә алырға);
- текст биттең бер яғына ғына яҙыла;
- һылтанмалар шул уk биттә, тик 2 һанға бәләкәйерәк шрифт менән бирелә.

*Фәнни телмәр менән сығыш яһауға әҙерлек. Ғилми тикшеренеү эшен яkлау.*

һайланған тема буйынса материал йыйылып тәртипкә килтерелгән, һығымта яһалған, текст яҙылған. Хәҙҙер тыңлаусыны йәки укыусыны ышандырыу, фараздарҙы дәлилләү, бәхәстә үҙ kарашыңды яkлай алыу иң мөһим эш була. Бының өсөн ентекле әҙҙерләнергә, сығыш яһауҙы асыk итеп планлаштырырға, алдан күрә белергә кәрәк.

Телмәрҙе формалаштырғанда:

1) иң беренсе эштә kулланылған төп төшөнсәләрҙең мәғәнәһен аңлата белеүгә иғтибар итергә кәрәк. Бында тасуирлау, теге йәки был күренешкә kылыkһырлама биреү, миҫалдар килтереп, сағыштырыу алымдарын kулланырға кәрәк;

2) тыңлаусыла kыҙыkһыныу уятыу өсөн тикшереү ваkытында асыkланған парадокстар (тап килмәү), kыҙыkлы мәғлүмәттәр килтерергә;

3) эштәге төп идеяға әкренләп, логик баҫkыс буйынса ғына яkын килергә кәрәк;

4) фекерҙе тыңлаусыларға еткереү өсөн, иғтибарҙы көсәйтеү маkсатында kыҙыkлы миҫалдар, мөрәжәғәттәр, сағыштырыуҙар, метафоралар kулланыу отошло;

5) фекер йөрөтөүҙҙең төҙҙөлөшөн, индуктив, дедуктив

фекер йөрөтөү моделдәрен белергә кәрәк. Дедукция - беренсел фараз итеүҙе сағылдырған тезисты иҫбат итеү, дөрөҫләү ул. Артабан фекер йөрөтөүҙең төп өлешө - тезисты үҫтереү, уны нигеҙләү, иҫбат итеү йәки кире ҡағыу килә. Индукция - тупланған факттарҙы анализлау баҫҡысы булған фекерҙең һығымтаға, йәғни синтезға табан хәрәкәте. Бында фараздар ҙа килтерелмәй, тезис та формалаштырылмай. Факттарҙы анализлау, сағыштырыу, дөйемләштереү нигеҙендә һығымталар сығарыла.

6) әгәр һөҙөмтәләр яһалып, һығымталар сығарылмаһа, - тикшереү эшенең мәғәнәһе юғала. Шуға ла һығымта сығарыуға айырым иғтибар итергә кәрәк.

*Телмәрҙең йөкмәткеһе өҫтөндә эш.* Сығыш яһауға әҙҙерлек кәмендә ө аҙна элек башлана. Эш бында оҙаҡ әҙҙерләнеүҙҙә түгел, ә буласаҡ сығышыңа өйрәнергә, хатта ғәҙҙәтләнергә, теманың эсенә инергә, тыңлаусылар ҡуйыуы ихтимал булған һорауҙарға яуап биреп ҡарарға кәрәк була. Әҙерләнеү эше үҙҙеңә, позицияңдың ныҡлығына ышаныс тыуҙыра.

Сығыш яһағанда һәр саҡ шуны иҫтә тоторға кәрәк: бөтәһе лә сығыштың нисек башланыуына, инеш һүҙгә бәйләнгән; ул тыңлаусыларҙың иғтибарын йәлеп итеү өсөн тәғәйенләнә. Художестволы инеш (шиғыр уҡыу, картина, видеофильм күрһәтеү), диалог формаһында, мөрәжәғәт итеү, һорау, өңдәү рәүешендә, тыңлаусыларҙы уйландырырлыҡ һорау ҡуйыу, бәхәс формаһында башлап китергә була. Боронғо риторика авторҙары, телмәр тексын тулы килеш яҙырға тәҡдим итеп, шымартырға, "биҙәргә" ҡушҡандар, һуңынан ятларға, бер нисә тапҡыр һөйләп, репетиция яһарға кәрәклеген әйткәндәр.

"Яҡшы телмәр" талаптары түбәндәгеләр:

1. Тема ҡыҙыҡлы, тыңлаусылар өсөн мөһим булырға тейеш.

2. Автор үҙҙе бик яҡшы белгән, башҡаларға ҡарағанда ныҡлы өйрәнгән теманы логик эҙмә - эҙлелектә, дөрөҫҫ әйтелеш ҡанундарын үтәп, тейешле һүҙҙәр ҡулланып, тыңлаусыларҙы яңы һәм баһалы әйберҙәр менән ҡыҙыҡһындырырға тейеш.

3. Теманы бик сағыу, һынлы итеп асырға, телмәрҙең йөкмәткеһен һәм төҙөлөшөн шуға буйһондорорға кәрәк.

4. Ахыр сиктә, телмәрҙең тәьҫирлеге - телмәр мәҙәниәтенең иң юғары талабы. Телмәрҙең йәнле һөйләү вариантында

булыуын ысын мәғәнәһендә оло байлыҡ: интонацияның, баҫымдың, паузаның, тондың, темптың сикһеҙ мөмкинлеген тәшкил итә.

Телмәр унышлы булһа ла, уның төҫҫһөҙ барып бөтөүенән дә насар нәмә юҡ, сығыштың һуңғы һүҙҙәре тыңлаусылар хәтерендә ныҡ ҡала һәм тотош телмәргә матур биҙәк бирә. Шуға күрә сығышҡа әҙҙерләнгәндә үк телмәрҙең аҙағына 2-3 вариантта йомғаҡлау һүзе әҙерләргә кәрәк.

## *1.4. Библиография төҙөү*

Ниндәй ҙә булһа тема буйынса библиографик исемлек төҙөгәндә, китапханалағы китаптарҙы ҡарап сығығыҙ. Йөкмәткеһенә, аннотацияһына иғтибар итегеҙ. Һеҙҙең темаға тап киләме? Журналдарға күҙәтеү яһағыҙ, 12-се һанында йыл эсендә баҫылған мәҡәләләр исемлеге бирелә. Шул исемлекте уҡып сығығыҙ. Китап йәки мәҡәлә хаҡындағы мәғлүмәтте түбәндәрәк бирелгән тәртиптә яҙығыҙ.

Библиографик исемлек – махсус тәртиптә яҙылған, ғилми хеҙмәтте яҙғанда өйрәнелгән әҙәбиәт исемлеге. Әҙәби һәм ғилми сығанаҡтар алфавит тәртибендә бирелә. Бер кешенең бер нисә китабы булған осраҡта, хеҙмәттең исеме иҫәпкә алына йәки китаптарҙың сығыу йылы хронологияһында яҙыла. Исемлеккә фәнни һәм ижади хеҙмәттә ҡулланылған бөтә сығанаҡтар индерелә. Һәр сығанаҡтың библиографик тасуирламаһы күрһәтелә.

1. *Хеҙмәт хаҡында мәғлүмәт түбәндәгеләрҙе үҙ эсенә ала: авторҙың фамилия һәм инициалдарын, хеҙмәт исемен, баҫтырып сығарыу урынын, нәшриәтен, баҫып сығыу йылын, биттәре һанын. Мәҫәлән: Хөсәйенов Ғ.Б. Ә ҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. - Өфө: Китап, 2006. - 148 бит. Тыныш билдәләре ҡуйылышына етди иғтибар бүленә.*
2. *Авторҙары 2-әү, 3-әү булһа, уларҙың китапта бирелеү тәртибендә яҙырға кәрәк. Пидкасистый П.И. Портнов М.Л. Искусство преподавания. - М.: Российское педагенство, 1998. - 184 с.*
3. *Авторҙары өсәүҙән артыҡ булһа, тәүгеһе генә яҙыла. Унан «һ.б.» ҡуйыла.*
4. *Әгәр ҙә сығанаҡ исемендә өҫтәлмә мәғлүмәт еткерелһә (дәреслек, йыйынтыҡ, уҡытыусы яҙмалары һ.б.),ул ваҡытта төп исемендән һуң ике нөктә ҡуйыла, шунан өҫтәлмә*

*мәғлүмәт яҙыла. М-н: Поляков С.Д. Психопедагогика воспитания: Опыт популярной монографии с элементами учебного пособия и научной фантастики. - М.: Мысль, 1984. - 268 с.*

5. *Сығанаҡ кемдендер мөһәррирлегендә сыҡһа, тәүҙә китап исемле яҙыла, ҡыя һыҙыҡ ҡуйыла, редакторҙың (мөхәррирҙең) фамилияһы һәм инициалдары бирелә, шунан «редакцияһында» һүҙе өҫтәлә. М-н: -------- М.; Новая школа, 1998. - 208*

6. *Сығанаҡтың титул битендә авторы күрһәтелмәһә, библиография китап исемен яҙыуҙан башлана.*

7. *Сығанаҡ берәй йыйынтыҡтан алынһа, авторы һәм хезмәте исеменән һуң ике ҡыя һыҙыҡ(//), йыйынтыҡ исеме, баҫып сығарыу урыны, нәшриәте, йылы, биттәре яҙыла, м-н: Иванов П.И. Воспитание коллективов // Педагогический поиск / Сост. И. Н. Баженова. - М.: Высшая школа, 1988. - С 113-120.*

8. *Гәзит, журналдарҙан алынған сығанаҡ түбәндәгесә яҙыла: автор фамилияһы, инициалдары, нөктә, мәҡәлә исеме, ике ҡыя һыҙыҡ (//), журнал исеме (тырнаҡтар ҡуйылмай), нөктә, һыҙыҡ, йылы, нөктә, һыҙыҡ, һаны, нөктә, һыҙыҡ, биттәре. Әгәр гәзит икән – нәшер итеү көнө күрһәтелә.*

*М-ән: Булатов В.И. Учителю о режиссуре настойчивого поведения // Педагогика. - 1996. - №3. - с 29-36.*

*Фәнни хеҙмәттәргә бәйле эштәр буйынса әҙәбиәт:*


1. Абуталипова Р.Ә. Башланғыс мәктәптә башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы: Методик комплекс: 3 кисәктән. - II киҫәк «Практикум». - Стәрлетамаҡ: СДПА, 2006. - 134 бит.

2. Арцев М.Н. Учебно исследовательская работа учащихся. Методические рекомендации // Завуч – 2005-№6 – с.4.

3. Борикова Л.В. Виноградова Н.А. Пишем реферат, доклад, в КР: Учебное пособие для студентов. - М.:. Изда.центр «Академия», 2000 – 128 с.

4. Сахипова З.Г., Ишкулова Г.Ш. Методика обучения научному стилю речи на уроках русского языка в башкирской школе. - Уфа: Китап, 2001 – 128 с.

## *1.5. Инша яҙыу*

Тел дәрестәрендә күберәк ирекле темаға инша яҙыу урын ала.

Ирекле темаға яҙҙырылған иншалар жанры буйынса хикәйәләү, тасуирлау, хөкөмләү төрҙәренә бүленә. Һаналған инша төрҙәренең. һәр береһенә хас төҙҙөлөшө, тел үҙенсәлектәре бар.

*1. Ләкин бөтә төр иншалар өсөн дөйөм талаптар ҙа ҡуйыла:*

2. Инша өсөн тема һайлау, уны анализлау күнекмәләре.

2. Тексттың төп фекерен билдәләү.

3. Инша өсөн материал йыйнау күнекмәләре.

4. Йыйылған материалды системалаштырыу күнекмәләре.

5. Яҙманы камиллаштырыу күнекмәләре.

6. Тексты билдәле стилдә төҙөү күнекмәләре.

7. Үҙ фекереңде (йөкмәткене) тел саралары ярҙамында дөрөҫ, аныҡ тасуири итеп төҙҙөү йәки биреү күнекмәләре.

*2. Инша яҙыу билдәле эҙмә-эҙлелектә ойошторола. Уның төп этаптары түбәндәгеләр.*

Материалды системаға килтереү уның тема һәм төп фекер өсөн иң кәрәклеләрен һайлап алыу, микротемаларҙы эҙмә-эҙлелектә, үҙ-ара бәйләнешле итеп тәртипкә килтереү, подтемаларға, параграфтарға берләштереү, йәғни телмәрҙе планлаштырыу тигән һүҙ ул. Материалды системалаштырыу ҡатмарлы эштәрҙән һанала, уның өҫтендә ныҡышмалы күиегеүҙҙәр генә телмәрҙең сифатын яҡшыртыуға алып килә.

*3. Материалды системалаштырыу күнекмәләре эҙмә-эҙ формалаштырыла:*

а) йыйылған материалды файҙаланып, тема буйынса план төҙөү;

б) материалды пландың, пункттарына ярашлы, эҙмә-эҙ урынлаштырыу;

в) микротемалар араһында сәбәп-һөҙемтә бәйләнешен булдырыу сараларын билдәләү, темаға ярашлы өҫтәлмәләр индереү;

г) материалды тейешле тәртиптә ҡараламаға яҙыу. Өҫтәлмәләр, төҙҙәтмәләр индереү өсөн дәфтәрҙҙә киң полялар ҡалдырыла, ҡайһы саҡта айырым карточкалар тотола.

4. *Иншаны яҡшыртыу өҫтөндә эш.* Яҙма эште камиллаштырыу телмәр үҫтереүҙҙә мөһим этаптарҙан һанала. Иншаны камиллаштырыу тигәндән орфографик, пунктуацион, стилистик хаталарҙы бөтөрөүҙе, текстың йөкмәткеһен тулыландырыусы, унын. композицион төҙҙөклөгөнә ирешеүҙе аңлайбыҙ.

Редакторлау өсөн, ғәҙәттә, махсус рәүештә боҙолған йәки хаталары төҙәтелмәгән текстар (күп осраҡта уҡыусыларҙың изложениелары, иншалары) алына һәм улар өҫтөндә төрлө эштәр үткәрелә:

— һөйләмдә урынһыҙ ҡулланылған һүҙҙәрҙе табыу, уларҙы синонимдары менән алмаштырыу;

— һөйләмгә һүҙҙҙҙәр, һүҙбәйләнештәр өҫтәү юлы менән йөкмәткене кесәйтеү, тәрәнәйтеү;

— мәғәнә нагрузкаһы булмаған йәки артыҡ һүҙҙәрҙе һөйләмдән алып ташлау менән тексты йыйнаҡ хәлгә килтереү;

— тавтологияны төҙәтеү һ. б.

*Хикәйәләү тибындағы иншалар.* Хикәйәләп һөйләү күнекмәһе һәр класта әҙҙәби әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен тикшергәндә үк бирелә, ә тел дәрестәрендә уҡыусыларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү, нигеҙҙҙә, традицион инша төрҙәренә (хикәйәләү, тасуирлау, хөкөмләү) *ө*йрәтеү аша башҡарыла.

Методистар хикәйәләү тибындағы ижади иншанын, төрлө сығанаҡтарға нигеҙләнеүен күрһәтәләр: ә) үҙен ҡатнашҡан, күргән хәл-ваҡиғаларҙы хикәйәләү; ө) кешенән ишеткәндәрҙе хикәйәләү; һ) уҡыусының тормош тәжрибәһе нигеҙендә уйлап яҙылған хикәйәләре; ҫ) әҙер сюжетҡа хикәйә төҙөү; ң) сюжетлы һүрәттәр һәм картиналар буйынса яҙыу; ҡ) мәҡәлдәр буйынса хикәйә төҙөү.
*Һурәтләу (иәки тасуирлау)*—билдәле бер предметты, урынды, йәнлекте, ҡошто, тәбиғәт күренештәрен, кешенен. ҡиәфәтен һ. б. әҙмә-әҙ тасуирлап яҙыу йәки һөйләү ул. Һүрәтләү хикәйәләүгә ҡарағанда ҡатмарлыраҡ ул уҡыусынан күҙҙәтеүсәнлекте, предметтың төп билдәһен башҡаларынан айыра белеүҙе; үҙенә генә хас үҙенсәлектәрен таба алыуҙы талап итә.

*Хөкөмләү* — уҡыусынан билдәле тема буйынса фекер йөрөтөүҙе, үҙ фекерҙәрен иҫбатлауҙы, дәлилләүҙе, һығымта яһауҙы талап итә торған ҡатмарлы монологик телмәр ул.

Хөкөмләүҙҙең композицион схемаһы түбәндәгесә була: тезис - иҫбатлауҙар - һығымта. Фекерләүҙҙең, иҫбатлауҙың бер-береһенә тығыҙ бәйләнеше, уларҙың береһе икенсеһенән уҫеп сығыуы,

аргументацияларҙың ышаныслы булыуы һәм фактик материалға нигеҙләнеүе хөкөмләүҙең төп үҙенсәлектәрен тәшкил итәләр.

### *1.6.Публицистик характерҙағы яҙма эштәр.*

*Информация* — вакиғалар, факттар, күренештәр хаkындағы kыҫkа хәбәр. Ғәҙәттә ул нимә, kайҙа һәм kасан булды тигән һорауҙарға яуап бирә. Информация — бөтәһенән элек kыҙыkлы яңылык ул.

*Информация* — оператив жанр. Kағиҙә буларак, унда кисә йәки бөгөн булып үткән вакиғалар тураһында һөйләнелә.. Информация нигеҙендә көн факты ята... Уның күләме ҙур булмай, автор фактты ғына атай, уға аңлатма биреп тормай. Әммә ошо факт та укыусыға нык тәьҫир итә. Kайһы берҙә 5—6 юллык информацияның да ҙур күләмле башkа жанрҙарға kарағанда тәьҫире көслөрәк булыуы ихтимал.

*Хәбәр* — яңылыkты, мөһим мәсьәләне уkыусыға һуңлатмай еткереүсе информацион жанр. «Уға фактты, ваkиғаны анализламайынса биреү мөмкин булғанда мөрәжәғәт итәләр. Хәбәр kыҫkа булыуы менән айырылып тора. Укыусы иғтибары бында факттың үҙенә генә йүнәлтелә. Хәбәр *нимә? kасан? kайҙа?* һорауҙарына яуап бирә. Иктисади, сәйәси һәм мәҙәни өлкәләр буйынса аның ойошторолған хәбәрҙең әһәмиәте ҙур».

Хәбәрҙең бер нисә төрө бар. Ул информацион характерҙа булырға, бер ниндәй аңлатмаһыҙ ниндәйҙер факт, күренеш тураһында хәбәр итергә мөмкин...

*Репортаж* — теге йәки был хәл-вакиға тураһында унда kатнашыусы йә иһә шаһиты булған журналистың асыk тел һәм факттар менән яҙылған мәkәләһе. Ул, ғәҙәттә, автор исеменән алып барыла һәм хикәйәләү барышына әңгәмә, интервью, хәбәр, һүрәтләмә элементтары ла килеп инә. Информация жанры буларak, репортаж күп осраkта ваkиғаларҙың барышын яктырта, уларға анализ бирә, йомғаklай. Бының өсөн автор k*айҙа, нимә, нисекF* һорауҙарына яуап бирә һәм документтарҙы, әңгәмәне, үҙҙенең шәхси күҙҙәтеүҙәрен файҙалана.

Репортаж шартлы рәүештә ваkиғалар, тематик һәм проблемалы репортажға бүленә. Ваkиғалар репортажы теге йәки был мөһим вакиғаға арнала, шунда уk яҙылып, гәзиткә тапшырыла һәм баҫтырыла. Тематик репортаж алдан планлаштырыла. Проблемалы

репортаж һирәгерәк ҡулланыла.

*Интервью* — матбуғатта баҫтырыу, радио һәм телевидение аша тапшырыу өсөн тәғәйенләнгән әңгәмә. Журналистар уны теге йәки был ваҡиғаға ниндәй ҡараште тороуын белеү маҡсатында файҙалана. Һүҙҙ барған предметты яҡшы белгән, ваҡиғаға дөрөҫ баһа бирергә һәләтле кешенең фекере интервьюның төп үҙҙенсәлеген билдәләй. Интервью — хәбәрсе менән әңгәмәлә катнашыусының берлектәге ижад емеше ул. Ул хәбәрсенән ныҡлы әҙҙерлек, кеше күңелен һиҙгер тойоп, әңгәмәне ҡыҙыҡлы итеп ҡора белеүҙе, һәр кемде асылып китеп һөйләштерә алыу ҡеүәһенә эйә булыуҙы талап итә.

Интервьюның төп геройы — журналист осрашҡан шәхес. Ул ғалим, артист, уҡытыусы, дәүләт эшмәкәре, спортсы, юбиляр булыуы мөмкин.

Был жанрҙы бер нисә төргә бүлеп йөрөтәләр:

Интервью → монолог
Интервью → һүрәтләмә
Интервью → хәбәр
Интервью → диалог

Шулар араһында иң популяры — интервью-диалог «сөнки унда ниндәй һорауҙар бирелгәне һәм уларға ҡайһылай яуап алынғаны шул килеш баҫыла».

*Хәбәрләмә* (корреспонденция) — публицистика жанрҙары араһында төп урындарҙың береһен биләй. Унда факттар һәм миҫалдар үҙҙәк, төп урынды алып тора. Факттарҙы йыйғас, автор башта уларҙы һүрәтләй һәм ошо факттарҙы анализлау нигеҙендә тейешле һығымталар яһай. Урында булмай тороп, әйберҙәрҙең торошон ентекләп өйрәнмәй тороп, темаға ҡараған бөтә нәмәне белмәй тороп, хәбәрләмәне яҙып булмай. Тимәк, уға барыһынан элек оперативлыҡ, конкрет тема, адрес хас.

*Мәҡәләлә* (статья) айырым факттар, ваҡиғалар һәм күренештәр нигеҙендә ниндәй ҙә булһа дөйөм фекер, идея үҫтерелә. Асылына нығыраҡ төшөнөү өсөн уны хәбәрләмә менән сағыштырыу урынлы.

| Хәбәрләмә | Мәkәлә |
|---|---|
| ә. Фактkа һәм факттар төркөмөнә таяна.<br>ө. Факттан унының асылын, мәғәнәһен асыуға бара.<br>һ. Тема тарыраk, нигеҙлерәк була. | ә. Факт ярҙамсы роль үтәй<br>ө. Дөйөм фекерҙән, идеянан ситләшеп, kуйылған мәсьәләнең айырым яктарын асыуға, нигеҙләүгә, үҫтереүгә күсә.<br>һ. Йәмғиәт тормошоноң теге йәки был яктары дөйөмләштерелә, тәрән тикшерелә. |

Мәkәләлә теоретик проблемалар аңлатыла, алдынғы тәжрибә таратыла, етешһеҙлектәр асыла.

Мәkәләләрҙә төрлө әҙәби алымдар kулланырға мөмкин: очерк, зарисовка, диалог ярҙамында автор үҙ фекерен ябай һәм асык һөйләп бирергә тейеш.

*һүрәтләмәлә* автор булып үткән вакиғалар, кешеләр хаkында йәнле тел менән һөйләй. һүрәтләмә яҙырға йыйынған хәбәрсе геройы менән әңгәмәләшеп кенә kалмай, һуңынан kағыҙға төшөрөү өсөн унын тышkы kиәфәтен, типик һыҙаттарын, әңгәмә булған урынды хәтерендә kалдыра. һәйбәт һүрәтләмә яҙыу өсөн автор бөтәһен дә үҙ күҙҙәре менән күрергә тейеш.

*һүрәтләмәлә* мотлаk ысынбарлыk хаkында һүҙ бара, айырым геройҙар тураһында һөйләнелә, сөнки унын төп максаты — тормошто дөрөҫ яктыртыу. һәр һүрәтләмә яңынын еңеүенә булышлыk итергә тейеш.

*Инша яҙыу буйынса әҙәбиәт.*

Аслаев Г.Х., Атнағолова С.В., Сынбулатова Ф.Ш. Башланғыс мәктәп уkыусыларын инша яҙырға өйрәтеү. - Өфө: Башkортостан китап нәшриәте, 1995. - 208 б.

Бикkужина Т.Ә., Ғафаров Б.Б. Әҙәбиәт дәрестәрендә картиналар файҙаланыу IV – VII кластар): Уkыу kулланмаһы. - СДПИ, 1992, - 88 б.

5-9 кластарҙа башkорт телен уkытыу методикаһы /Аҙнағолов Р. Редакцияһында. - Өфө: «Китап», 1996. - 320 бит.

Ғафаров Б.Б. Әҙәбиәттән яҙма эштәр. Өфө: Башkортостан «Китап» нәшриәте, 1999. - 208 бит.

## 1.7. *Схема, таблица, моделдәр төҙөү*

*Логик – мәғәнә моделе* – өйрәнеләһе йәки өйрәнелгән материалдың бөтә үҙенсәлектәре, был үҙенсәлектәр координата уkтарында теманың һәр мәғәнә билдәләрен kуя торған урын.
Логик мәғәнәүи моделде төҙөр өсөн, тема буйынса бөтә мәғлүмәтте kарап сығырға, нисә уk булырға тейешлеген асыkларға , һәр уkтағы төйөндәргә ниндәй мөһим үҙенсәлекте күрһәтергә икәнлеген билдәләргә кәрәк. Материалдар төрлө дәреслектәрҙән, журналдарҙан һ.б. сығанаkтарҙан туплана. Уkтарҙағы (координаттарҙағы) төйөндәр һаны төрлөсә булырға мөмкин. Был теманың kатмарлылығына бәйле.

Схеманы эшләгәндән һуң, уның хаkында һөйләргә әҙерлек талап ителә. Быны схеманы яkлау тип тә атарға мөмкин. Һөйләргә әҙерләнгәндә, түбәндәгеләргә иғтибар ителә.

1. Л-ММ-дә теманың kайһы үҙенсәлектәрен күрһәттең. Быға ярашлы координаттарҙы һанап үт.
2. Моделдең координаттары, төйөндәренә kылыkһырлама бир. Схемала ваkиға, материал бик kыҫkа һөйләм, һүҙбәйләнеш, һүҙ аша еткерелә. Ә һөйләгәндә, мәғлүмәт тулыраk, kыҙыkлыраk булһын. Телмәрең төҙөк һәм эҙмә-эҙлекле булыуына ынтыл.

Тел фәненең бер бүлеген өйрәнеү процессына киң kулланылыш тапkан күргәҙмә әбәптәрҙең береһе – **схема.** Уның ярҙамында грамматик категорияларҙың, теманың бүленеше ыkсын, аныk итеп күрһәтелә. **Схема** һүҙ төркөмдәрен күҙ алдына килтереүҙә файҙаланылған ябай йәки тәрән йөкмәткеле график әсбап һанала. Мәҫәлән:

Һөйләм киҫәктәре

↙ ↘

Баш киҫәктәр Эйәрсән киҫәктәр

Схеманы эшләгәндә, ниндәй ҙә булһа категорияның бүленешен билдәләргә, аныk исемдәр менән уларҙы уkтар, һыҙыkтар аша бәйләнешен күрһәтергә кәрәк.

*Плакат* – таблицаларҙа өйрәнелә торған темаға ярашлы миҫалдар, орфограммалар контекст эсендә бирелә. (Әйтәйек, мәkәлдәр яҙылған плакат). Плакатты, схеманы эшләр өсөн перо, фломастерҙар менән яҙыу оҫталығы талап ителә. Бөгөнгө көндә

компьютерҙар менән эш итә белгән студенттар байтаҡ. Улар схеманы, плакат-таблицаларҙы экранда күрһәтә алырлыҡ итеп эшләй алалар.

*Терәк-конспекттар, блок-схемалар* ҙа мәктәптә киң ҡулланыла. Улар иҫтә ҡалырлыҡ шартлы тамғаларҙан һүрәттәрҙән тора, уҡтар менән тоташтырыла, миҫалдар ҙа күрһәтелергә мөмкин. Шартлы тамғалар, символдар башҡаларға аңлайышлы булһын, ҡағиҙәнең төп моменттарын еткерһен.

Студенттарҙың эштәрен баһалағанда, түбәндәгеләр күҙ уңында тотола.

1. Схемала теманың бөтә үҙенсәлектәре, билдәләре күрһәтелгән булыуы.
2. студенттың схема буйынса эҙмә-эҙлекле һөйләүе.
3. Схемаларҙың ҡыҙыҡлы, уйланылған булыуы, эстетик зауыҡ менән башҡарылыуы.

Миҫал өсөн ҡылым һөйкәлештәре һәм төркөмсәләре тип аталған терәк-конспект тәҡдим итәбеҙ.





Әҙәбиәт: 1. Байсыуаkова Ә. Терәк конспекттар. - тел дәрестәрендә // Б.У. - 1998. - № 5. - 32 – се б.

Мусина Г. Терәк таблицалардан файдаланыйk. // Мәғариф. - 2002. - № 11. - 11 се б.

Сигал Т.К. Работа сопорными конспектами на уроках английского языка // И в школе. - 2008. - №1 – с 44.


### *1.8. Презентация һәм проекттар әҙерләү*

*Презентация* – Microsoft Power Point программаһы ярҙамында әҙерләнә. Шуға күрә презентация яһау өсөн

компьютерҙа эшләй белеү мотлаҡ. Тема буйынса презентация, слайд-шоу яһау эҙмә-эҙлеге:

1. Материал йыйыу (һүрәт, фоторәсем, карта, гәзит-журнал материалдары, аудио, видеояҙма һ.б.)
2. Материлды тәртипкә килтереү. Слайдтарҙың килеү тәртибен уйлау, планлаштырыу, сценарий төҙөү.
3. Һәр слайд өсөн һөйләмдәр уйлау, цитаталар, мәҡәлдәр, өҙөктәр, табыу.
4. Презентацияны эшләү. Кәрәкле фон, анимацияларҙы, кадрҙан кадрға күсеү эффектын табыу.
5. Презентацияны күрһәтергә, яҡларға әҙерләү. Күрһәтеү.

Презентацияның проектын (планын) эшләргә мөмкин. Был эшкә әҙерлек тулыһынса презентация әҙерләү менән тап килә. Материалдарҙы түбәндәгесә тапшырыла.

| Слайд һаны | Слайдта яҙылған һөйләм | Күргәҙмә материал (Фоторәсем, карта, шиғырҙан өҙөк һ.б.) |
|---|---|---|
| 1.<br>2. | | |

Студент һәр слайд өсөн һөйләмдәрҙе яҙа. Күргәҙмә материалды, слайд һанын күрһәтеп, папкаға йыя.

Әҙәбиәт:


1. Зәйнуллина Р.В. Әҙәбиәт дәрестәрендә мәғлүмәтле технологиялар. // Башҡортостан уҡытыусыһы. - 2008. Б.-.46.
2. Кузбеков Ф. Информационная технология при изучении башкирского языка.// Башҡортостан уҡытыусыһы.- 2007.-3.-с.3.
3. Протасеня Е.П., Компьютерное обучение: за и против// Иностранные языки в школе.- 1997.- с.3.
4. Фәхрисламова Ғ.И. Дәрестә мәғлүмәти технологияларҙы ҡулланыу.// Башҡортостан уҡытыусыһы.-2008.- Б.29.


*Проект эше* тип студент тарафынан – ниндәйҙер ҡыҙыҡлы проблеманы хәл итеүгә йүнәлтелгән, үҙенең бөтә һәләттәрен, мөмкинлектәрен файҙаланып (Үҙ аллы йәки төркөм эсендә) практик әһәмиәте булған һөҙөмтәгә ирешеү һәм уны кешеләр алдына күрһәтеү атала.

Проекттар методының асылы шунда: студенттар педагог

етәкселегендә эҙмә-эҙлекле рәүештә проекттар эшләйҙәр. Проект идеяһын билдәләүҙә студенттарҙың теләге, ҡыҙыҡһыныу өлкәһе иҫәпкә алына. Проект эшләү барышы һәм нәтижә биреү формалары уҡыусылар тарафынан үҙ-ара кәңәшләшеп билдәләнә. Проектлау күмәк рәүештә төркөмдәрҙә алып барылырға мөмкин. Ҡатмарлы мәсьәләләр буйынса фекер алышыу, дискуссия ойоштороla. Эш барышында ҡатнашыусылар информация менән алмашалар. Проектлау процесы ҡәтғи алгоритмға буйһона, был алгоритм проект асылынан сығып, уҡыусылар тарафынан төҙөлә.

Проект эшләүҙең этаптары:

1. Тема һайлау.

2. Проектлау планын төҙөү. Уны камиллаштырыу.

3. Проектлау эше тәртибен билдәләү. Кәрәк булһа, башҡа уҡыусылар эше менән бәйләнеш нөктәләрен билдәләү. Төркөм ағзаларының эшмәкәрлек ҡағиҙәләрен ҡабул итеү.

4. Материал эҙләү. Әҙәбиәт, фәнни әҙәбиәт, мәҡәләләр менән танышыу, йыйыу. Нәтижәләрҙе яҙыу.

5. Проекттың варианттарын күҙаллау. Отошлоһон һайлау.

ҡуйылған талаптарға тура килтереп, проектты башҡарыу.

6. Проектты яҡлар өсөн текст әҙерләү. Сығыш яһау. Фекер алышыуҙа ҡатнашыу.

7. Тәҡдимдәр булһа, төҙәтмәләр индереү. Проекттың камиллаштырған вариантын эшләү.

Миҫал өсөн «Китапсыҡ төҙөү» темаһы буйынса проект эшен тәҡдим итәбеҙ. Ниндәй ҙә булһа яҙыусының әҫәрҙәренә таянып китапсыҡ төҙөргә кәрәк. Китапсыҡтың темаһы билдәләнә. Ижади төркөм һайлана. Төркөм эсендәге студенттарға эштәр бүленә. Бер студент темаға ярашлы шиғырҙар һайлай, икенсе студент китапсыҡ өсөн һүрәттәр, фоторәсемдәр эҙләй, кемдер һүрәт төшөрә, кемдер китапсыҡҡа шиғырҙарҙы күсерә h.б. Йыйынтыҡтың титул бите, йөкмәткеһе, текстары һәм иллюстрациялары булырға, әҙәбиәте күрһәтелергә тейеш. Тағы ла студенттар төрлө ҡыҙыҡлы нәмәләр уйлап сығарырға мөмкиндәр. Китапсыҡ әҙер булғас, уны презентациялауға әҙерлек башлана.

Ни өсөн китапсыҡҡа был тема һайланды, ниндәй шиғырҙар алынды, ниндәй һүрәттәр, иллюстрациялар ҡуйылды – ошо һәм башҡа мәғлүмәтте матур итеп һөйләп бирергә кәрәк. Презентация ваҡытында йыйынтыҡтан шиғырҙар тасуири итеп уҡыла h.б. дәрескә бер-нисә китапсыҡ әҙерләнә икән – ул ваҡытта һөйләшеү,

фекер алышыу ойоштороla. Ыңғай һәм кире яҡтары күрһәтелә. Баһалана. Китапсыҡтарҙы күргәҙмәгә ҡуйырға мөмкин.

Проект эше итеп гәзит сығарыу, ребус, кроссворд төҙөү, кисә, бәйге өсөн сценарий яҙыу, аҙналыҡ программаһын төҙөү, альбом эшләү, фотоһүрәт, һүрәт эшләү, аудиояҙма әҙерләү, презентация эшләү кеүек традицион һәм традицион булмаған эштәр тәҡдим ителә. Был проекттарҙы башҡарыу этаптары төрлөсә булырға мөмкин. Ҡайһы бер проекттарҙы уҡыусылар үҙ аллы эшләй, ҡайһы берҙәрен ижади төркөмдәр башҡара.

Нисек кенә булмаһын, студент быңдай эштәрҙе башҡарыр алдынан гәзит-журналдарға күҙәтеү яһарға, был типтағы эштәрҙе ентекле өйрәнергә тейеш. Унан үҙ темаһы буйынса материал туплай. Дәреслектәргә, методик хеҙмәттәргә, төрлө сығанаҡтарға мөрәжәғәт итә. Уҡытыусы – ижади шәхес. Ижади һәләттәрҙе үҫтерер өсөн уйлап сығара белергә лә кәрәк. Шуға күрә ижади эштәр башҡарыу студенттан үҙ эшенә ижади ҡарашты талап итә.

Студенттарға түбәндәге ижади эштәр тәҡдим итәбеҙ.

*Башҡорт теле аҙналығы планын яҙыу.* Синыфтан тыш эштәрҙең был төрө, исеменән күренеүенсә, бер аҙна дауам итә. Аҙнаның һәр көнөнә ниндәй ҙә булһа берәй эш билдәләнә: стена гәзите, лингвистик бюллетень сығарыу. Стендтар, альбомдар төҙөү, шулай уҡ радиотаршырыу, кисәләр ойоштороу, төрлө яҙма эштәр үткәреү, викторина, КВН-дар ойоштороу кеүек саралар планлаштырыла. Был яҡтан ҡарағанда, тел аҙналығын синыфтан тыш эштәрҙең синтезы тип йөрөтөргә мөмкин.

Башҡорт теленән үткәрелгән *кисәләр* - күп һанлы уҡыусыларҙың ҡатнашыуын талап иткән эш төрө. Улар әҙерлек менән ойоштороla. Әҙерлек эше тема һайлауҙан, уның йөкмәткеһен, кисәнең барышын аныҡлауҙан башлана. Кисәнең программаһы үҙ эсенә түбәндәгеләрҙе ала доклад-сығыштар, лекция-әңгәмәләр, әҙәби-музыкаль монтаж, шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, йыр һәм бейеү башҡарыу, инсценировкалар, викторина, грамматик уйындар, шарада, йомаҡтар һ.б.

*Радиотапшырыуҙар* өсөн материал әҙерләү йәш быуында яуаплылыҡ тойоу, техник саралар менән эшләй белеү, телмәр культураһын үҫтереү кеүек тормошсан сифаттар тәрбиәләй.

Туған тел буйынса радиотапшырыу эшен ойоштороу алдынан уның маҡсаты, бурыстары аңлатыла. Республика район колхоз һәм мәктәп радиотапшырыуҙарын бергәләп тыңлау, фекер

алышыу, радиокомитетkа экскурсия ойоштороу ҙа йоғонтоло буласаk.

*Тематик гәзиттәр.* Быңдай яҙма эш төрө тематик кисәләргә әҙерләнә. Мәҫәлән, «XIX быуатта башkорт теленең яҙмаһын булдырырға ынтылыусы ғалимдар» (В. Катаринский, А. Г. Бессонов, М. Ҡыуатов, М. Ҡулаев) темаһына арналған махсус тематик гәзиттәр. Уны сығарыуҙа түңәрәк ағзалары ғына түгел, бәлки бөтә студенттар ҙа kатнаша.

Әҙәбиәт:

1. Бикkужина Т.Ә. Башkорт теленән синыфтан тыш эштәр. - Өфө: «Китап», 1997.-136 бит.

2. Зәйнуллина Р.В. Әҙәбиәт дәрестәрендә мәғлүмәтле технологиялар. // Башkортостан уkытыусыһы. - 2008. Б.-.46.

3. Кукушина. В.С. - М.: ИКЦ «Мар»,2006. - 33 с.

4. Кузбеков Ф. Информационная технология при изучении башкирского языка.// Башkортостан уkытыусыһы.- 2007.-3.-с.3.

5. Моталова Л.Яңы быуын дәреслектәре уkытыуҙың яңы мөмкинлектәрен аса // Б.У. - 2007 - № - 35-се бит.

6. Пахомова Н.Ю. Методика учебного проекта в образовательном учреждении. - М.: АРКТИ, 2003. - 112 с.

7. Педагогические технологии: Учебное пособие для студентов педагогических специальностей под общей редакцией

8. Полат Е.С. Методика проектов на уроках иностранного языка // Ин.яз в школе. - 2000. - № -с.3.

9. Протасеня Е.П., Компьютерное обучение: за и против// Иностранные языки в школе.- 1997.- с.3.

10. Сәмиғуллин Г., Баһавиев. Уkыусыларҙың проект эше белән идарә итеү. // Фән һәм мәктәп. - 2005. - №3. - 26-сы бит.

11. Фәхрисламова Ғ.И. Дәрестә мәғлүмәти технологияларҙы kулланыу.// Башkортостан уkытыусыһы.-2008.- Б.29.

## II бүлек. Бер предмет өсөн хас үҙаллы эштәр.
## 2.1. Башҡорт теленән анализ төрҙәре.

*hүҙгә лексик анализ яһау тәртибе*

1. Аңлатмалы hүҙлектән hүҙҙең мәғәнәһен асыҡлағыҙ.
2. Бирелгән hүҙҙең килеп сығышын күрhәтегеҙ (төп башҡорт hүҙе йәки үҙҙләштерелгән hүҙ, сит телдән ингән hүҙ).
3. Ҡулланылышы буйынса ниндәй hүҙ булыуын әйтегеҙ Үкиң ҡулланылышлы, тар ҡулланылышлы).
4. Тар ҡулланылышлы hүҙ булhа, уның ниндәй төркөмгә ҡарауын билдәләгеҙ (профессиональ, интернациональ, яңы hүҙҙәр, диалект, иҫкергән hүҙҙәр).
5. hүҙҙең ниндәй мәғәнәлә ҡулланылыуын билдәләгеҙ (тура, күсмә).
6. Күсмә мәғәнәлә ҡулланылhа, hүрәтләү сараларының ниндәй төрөнә ҡарауын асыҡлағыҙ (метафора, сағыштырыу, эпитет).
7. Һүҙҙең синонимдары, антонимдары, омонимдары барлығын билдәләгеҙ.

*Фонетик анализ яһау тәртибе*

1. hүҙҙ нисек ишетелә, шулай, ижеккә бүлеп, яҙып алығыҙ, баҫымын ҡуйығыҙ.
2. Һүҙҙең нисә өндән тороуын, уларҙың ниндәй хәрефтәр менән белдерелеүен әйтегеҙ hәм транскрипцияла күрhәтегеҙ.
3. Һуҙынҡы өндәрҙе табығыҙ hәм hәр өнгә характеристика бирегеҙ.
4. Тартынҡы өндәргә характеристика бирегеҙ.
5. Тартынҡы өндәрҙең телмәр ағышында үҙгәреү осраҡтарын күрhәтегеҙ.

*hүҙҙьяһалыш буйынса анализ тәртибе*

1. Бирелгән hүҙҙүҙең ниндәй hүҙҙ төркөмөнә ҡарауын билдәләгеҙ.
2. Һүҙҙең төрөн әйтегеҙ (тамыр, яhалма, ҡушма).
3. Һүҙҙең тамырын hәм ялғауҙарын билдәләгеҙ.
4. Ялғауҙарҙың төрөн билдәләгеҙ (яhаусы, үҙгәртеүсе).
5. Үҙҙгәртеүсе ялғауҙарҙың грамматик мәғәнәһен аңлатығыҙ.
6. Һүҙьяhалышының яhалыу юлдарын билдәләгеҙ (мәғәнәүи, фонетик, морфологик, синтаксик).
7. Ҡушма hүҙҙ булhа, ниндәй юлдар менән яhалыуын әйтегеҙ (ҡушыу, парлау, ҡабатлау, бәйләү, ҡыҫҡартыу).

*Исемдәргә анализ яһау тәртибе*

Исемдең башланғыс формаһын әйтегеҙ.
Яңғыҙлыk йәки уртаkлыk исем булыуын билдәләгеҙ.
Яһалышы яғынан ниндәй төргә kарауын асыkлағыҙ (тамыр, яһалма, kушма, парлы, kыҫkартылған).
Исемдең ниндәй һанда, затта, килештә булыуын әйтегеҙ.
Исемдең эйәлек йәки хәбәрлек категорияһын билдәләгеҙ.
Һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килеүен асыkлағыҙ.

*Сифаттарға анализ яһау тәртибе*

Сифаттың башланғыс формаһын асыkлағыҙ.
Сифаттың kайһы төркөмгә kарауын билдәләгеҙ (төп, шартлы).
Яһалышы яғынан ниндәй төргә kарауын асыkлағыҙ (тамыр, яһалма, kушма).
Ниндәй дәрәжәлә булыуын әйтегеҙ.
Исем урынында kулланылһа, уның ниндәй грамматик билдәләрен kабул итеүен асыkлағыҙ (һан, зат, килеш, эйәлек, хәбәрлек).
Һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килеүен әйтегеҙ.
Һүрәтләү сараһы булып килһә, төрөн билдәләгеҙ (метафора, сағыштырыу, эпитет).

*Ҡылымдарға анализ яһау тәртибе*

Ҡылымдың башланғыс формаһын билдәләгеҙ.
Ҡылымдың төрөн билдәләгеҙ (үҙ аллы, ярҙамсы).
Составы буйынса kылымдың төрөн әйтегеҙ (тамыр, нигеҙ).
Яһалышы буйынса ниндәй төргә kарауын билдәләгеҙ (тамыр, яһалма, kушма).
Һөйкәлеш категорияһы (хәбәр, бойороk, шарт, теләк-өндәү).
Барлыk, юkлыk формаһын билдәләгеҙ.
Ҡылымдың йүнәлеш категорияһын билдәләгеҙ (төп, kайтым, төшөм, уртаkлыk, йөкмәтеү).
Заман категорияһын әйтегеҙ.
Һан категорияһын билдәләгеҙ.
Зат категорияһын асыҫлағыҙ.
Ҡылымдың ниндәй төркөмгә kарауын әйтегеҙ (сифат, хәл, исем, уртаk).
.Ҡылымдың ниндәй һөйләм киҫәге булып килеүен асыkлағыҙ.

*һүҙбәйләнештәргә анализ яһау тәртибе*

Һөйләмдән һүҙбәйләнеште айырып алығыҙ, башланғыс формаһын билдәләгеҙ. Эйәртеүсе һҙҙән сығып эйәреүсе һүҙҙгә ниндәй һорау kуйырға кәрәк?

Был һүҙбәйләнеш ниндәй юл менән яһалған (те8мә, эйәртеүле)?
һ. Эйәртеүле юл менән яһалған һүҙбәйләнештә эйәреүсе һәм эйәртеүсе һүҙҙәргә күрһәтегеҙ, улар ниндәй һүҙ төркөмөнән килгәнF kайһы төр бәйләнешкә инә (ярашыу, башkарылыу, һөйкәлеү, йәнәшәлек)?
ç. Төҙөлөшө буйынса kайһы төргә kарай (ябай, kушма)?
5. Һөйләмдә ниндәй синтаксик функция үтәй?
6.Һүҙбәйләнештең моделен төҙөгөҙ.

*Ябай һөйләмдәргә синтаксик анализ яһау тәртибе*

Һөйләмдең нигеҙен табып, ябай икәнлеген асыkлағыҙ.
Әйтелеү маkсатына kарап төрөн билдәләгеҙ (хәбәр, өндәү, һорау).
һ. Төҙҙөлөшө буйынса ниндәй төркөмдәргә kарауын әйтегеҙ:
ике йәки бер составлы; әгәр бер составлы булһа, kайһы төрө (билдәле эйәле, билдәһеҙ эйәле, дөйөм эйәле, эйәһеҙ, атама);
б) тарkау йәки йыйнаk;
в) тулы йәки кәм (әгәр тулы булмаһа, ниндәй һөйләм киçәге юk икәнлеген билдәләгеҙ).
Һөйләмдең тәүҙә баш, артабан эйәрсән киçәктәрен табып, аçтарына һыҙығыҙ. Уларҙың һәр береһенең ниндәй һүҙ төркөмөнән килгәнлеген билдәләгеҙ.
Әгәр һөйләмдең айырымланған эйәрсән киçәктәре булһа, күрһәтегеҙ.
Тыныш билдәләре булһа, уларҙың kуйылышын аңлатығыҙ.

*Теҙмә kушма һөйләмдәргә анализ яһау тәртибе*

Интонацияһы яғынан һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.
kушма һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.
Һөйләмдәрҙең нигеҙҙәрен табығыҙ.
Ҡушма һөйләмде барлыkkа килтереүсе ябай һөйләмдәр үҙ-ара ниндәй теркәүестәр (йыйыу, kаршы kуйыу, бүлеү, һығымта яһаусы) менән бәйләнгәндәр икәнен күрһәтегеҙ.
Ҡушма һөйләмдең мәғәнәһен (һанау, kаршы kуйыу, ваkиғаларҙың бер-бер артлы килеүе) билдәләгеҙ.
Тыныш билдәләренең kуйылышын аңлатығыҙ.
һөйләмдең схемаһын төҙөгөҙ.

*Эйәртеүле kушма һөйләмдәргә анализ яһау тәртибе*

Интонацияһы яғынан һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.
Ҡушма һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.
Һөйләмдәрҙең нигеҙҙәрен табығыҙ.

Баш һәм эйәрсән һөйләмде күрһәтегеҙ.
Эйәрсән һөйләмдәргә һорау бирегеҙ.
Эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.
Тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатығыҙ.
Һөйләмдең схемаһын төҙөгөҙ.

*Әҙәби әҫәргә анализ яһау тәртибе*

Әҫәрҙең темаһын асыҡлағыҙ.
Әҙәби әҫәр ижад ителгән осор тураһында мәғлүмәт бирегеҙ.
Әҫәрҙең жанрын билдәләгеҙ.
Әҫәрҙең сюжетын һәм композицион төҙөлөшөн күҙаллағыҙ.
Әҫәрҙә ҡуйылған проблемалар һәм төп конфликтты күрһәтегеҙ.
Образдар системаһын барлағыҙ. Ыңғай һәм кире геройҙар, ярҙамсы персонаждарҙы асыҡлағыҙ.
Геройҙы тәрбиәләгән, уның рухи ҡараштарын формалаштырған социаль ерлек тураһында фекер йөрөтөгөҙ.
Әҫәрҙең тел-стиль үҙенсәлектәренә анализ яһағыҙ.
Әҙәби әҫәрҙең әһәмиәте тураһында уйланығыҙ һәм һығымта яһағыҙ.

*Әҙәби образдарға характеристика биреү тәртибе*

Геройҙың тышҡы ҡиәфәте нисек һүрәтләнгән?
Геройҙы тәрбиәләгән, уның донъяға ҡарашын формалаштырған социаль шарттар ниндәй?
Геройҙың рухи донъяһы, кисерештәре һәм әҫәрҙәге персонаждар менән мөнәсәбәте нисек бирелгән? Әҫәрҙҙәге конфликттарҙы хәл итеүҙҙә геройҙың роле ниндәй?
Герой8ың телмәр үҙенсәлектәре нисек сағылдырылған?
Образды һүрәтләүҙҙә тағы ла ниндәй саралар ҡулланылған?
Герой әҫҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен асыуҙа һәм әҙҙәбиәт үҫҫешендә ниндәй урын биләй?

## 2.2. «Тасуири уҡыу һәм уны уҡытыу методикаһы» предметы буйынса үҙ аллы эштәрҙе башҡарыуға бәйле кәңәштәр.

1. Студенттың тексты тасуири уҡыуға әҙерлеге

Тасуири уҡыу – текста сағылдырған йөкмәтке, образ, картина, күренештәрҙең характерлы үҙенсәлектәрен, авторҙың ваҡиға, күренеш һәм геройҙарҙың ҡылыҡтарына, эшмәкәрлегенә ҡарашын асып, әҫәргә хас тойғо менән уҡыу күнекмәһе ул.

Өйҙә тасуири уҡырға әҙерләнгәндә, түбәндәгеләргә иғтибар итергә кәңәш ителәК

1. Тексты ентекләп уҡып сығығыҙ, идея-тематик

йөкмәткеһен асыҡлағыҙ, автор әйтергә теләгән фекерҙе аңларға тырышығыҙ.

2. Тыңлаусыға нимә тураһында еткерәсәгегеҙҙе уйлағыҙ.

3. Әҫәрҙәге ваҡиға, күренеш, хәлгә мөнәсәбәт, ҡараш булдырығыҙ.

4. Әҫәрҙе тыңлаусыға аңларлыҡ, текстҡа дөрөҫ баһа бирерлек кимәлдә уҡырға әҙерләнегеҙ. Тасуири уҡыу саралары үҙ эсенә һулыш, тауыш, пауза, баҫым, тон, интонация элементтарын берлештерә. Тасуири уҡырға әҙерләнгәндә, шулар хаҡында теоретик мәғлүмәтте иҫкә төшөрөгөҙ. Тексттың ҡайһы өлөшөндә пауза ҡуйыла, ниндәй тиҙлектә уҡырға, ҡайһы һүҙгә логик баҫым төшә, орфоэпик ҡағиҙәләргә ярашлы нисек уҡырға – барыһын да матурлап анализлағыҙ. Тексттың партитураһын төҙөгөҙ.

Тексты бер нисә ҡат төрлө вариантта тасуири уҡып ҡарағыҙ. Иптәштәрегеҙгә уҡып күрһәтегеҙ. Магнитофонға яҙҙырығыҙ. Иң уңышлы килеп сыҡҡанын тағы ла бер нисә мәртәбә күҙгә алдында ҡабатлағыҙ.

*2. Уҡыусыларҙы тасуири уҡырға әҙерләү.*

Үҙ аллы эштәрҙең бер төркөмөн балаларҙы теоретик мәғлүмәт менән таныштырыу тәшкил итә. Бында уҡыусыларға баҫым, пауза, тиҙлек кеүек төшөнсәләр хаҡында белешмә биреү күҙаллана. Был эште түбәндәгесә ойоштороорға мөмкин:

1. Иң беренсе үҙегеҙ теоретик мәғлүмәтте иҫкә төшөрөгөҙ.

2. Уҡыусыларға һөйләргә әҙерләнегеҙ. Уларға был мәғлүмәтте белеүҙең мөһимлеген кәрәклеген иҫбатлауҙан башлағыҙ. Әйтәйек, логик баҫымды дөрөҫ ҡуйыу ни өсөн кәрәк?

3. Теоретик мәғлүмәт уҡыусылар аңларлыҡ телдә еткерелһен, схема, таблицалар ҡуллан, тексттың партитураһын эшләп күрһәт.

4. Миҫал өсөн бер нисә әҫәрҙән өҙөктәр уҡып күрһәт. Өҙөктәрҙе дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған варианттарҙа уҡып ҡара.

5. Берәй тексты бергәләп тикшерегеҙ. Әйтәйек, логик баҫымлы һүҙҙәр табыуҙы ойоштор. Уҡыусыларҙың хаталары булһа, бергәләп төҙәтһендәр.

6. Хор менән, парлап, рәт менән уҡыуҙы ойоштор. Был текст аудиояҙмала булһа, бик тә һәйбәт. Уҡыусылар аудиояҙманы тыңлаһын.

7. Һығымта яһағыҙ.

Бындай эш тәртибе студент тарафынан үҙгәртелә ала. Дәрес

фрагментын әҙерләгәндә, һәр һорау, уға яҡынса яуап ентекле яҙыла.

*3. Тасуири уҡыуҙы ойоштороу өсөн әңгәмә үткәреү. Дәрес фрагментын яҙыу.* Шиғырҙарҙы тасуири уҡырға өйрәтеү миҫалында ҡарап үтәйек.

Шиғырҙарҙы тасуири уҡырға өйрәтеү тәртибе яҡынса түбәндәге эҙмә-эҙлектә бара:

а) уҡыуға әҙерлек әңгәмә;

б) шиғырҙы уҡытыусының үрнәк уҡыуы;

в) уҡыусыларҙың тулы килеш эстән уҡып сығыуҙары;

г) шиғырҙы строфалап уҡыу һәм тикшереү;

ғ) шиғырҙы тотош тасуири уҡыу;

д) йомғаҡлап уҡыу.

Һанап кителгән этаптарҙың иң яуаплыһы булып шиғырҙы строфалап уҡыу һәм тикшереү, тасуири уҡыуға әҙерлек өлөшө тора. Был эш шиғырҙың йөкмәткеһен анализлауҙан башлана, уҡытыусы, һәр строфала һүҙ нимә тураһында икәнлеген асыҡлап, һорауҙар бирә. Тасуири уҡыуға әҙерлекте төрлөсә алып барырға мөмкин:

1) уҡытыусы шиғырҙы ниндәй интонация менән уҡырға кәрәклеген үҙе аңлата:

2) уҡыусылар менән әңгәмә аша билдәләй;

3) уҡыусылар үҙ аллы анализлайҙар, шунан бергәләп тикшереү ойоштороla;

4) төркөмдәрҙә, парҙарҙа эшләү һәм уларҙы тыңлау.

Әңгәмә түбәндәгесә ойошторола:

- Был дүрт юллыҡтың ҡайһы урындарында пауза яһала һәм ни өсөнҒ

- Ниндәй һүҙҙәргә логик баҫым төшә тип уйлайһығыҙ. Фекерегеҙҙе иҫбатлағыҙ. Уҡып күрһәтегеҙ. Ҡалғандар нисек уйлай, иптәшегеҙ дөрөҫ билдәләнеме?

- Шиғырҙы ниндәй тиҙлектә уҡырға кәрәк? Әйҙә, уҡып күрһәт әле, нисек килеп сығыр икән? Башҡа төрлө тойғоно белдереп уҡып ҡарайыҡ һ.б.

- Ҡайһы урында тауышты күтәрәбеҙ, ҡайһы урында кәметәбеҙ? Уҡып күрһәтегеҙ.

Әңгәмә барышында уҡыусыларҙы активлаштырыр өсөн. Ни өсөн? Ә һин нисек уйлайһығыҙ? Уның фекере менән килешәһегеҙме? Кем икенсе төрлө уйлай? Иптәшегеҙ дөрөҫ

укынымы? Һеҙҙең тәкдим ниндәй? кеүек һорауҙарҙы йышырак бирегеҙ.

Аудиояҙмалар kулланығыҙ. Укыусылар алдан партитураны төҙөһәләр, дөрөҫлөгөн асыkлар өсөн аудиояҙма тыңлатыу отошло. Берәр стофаны тыңлатып, унан хор менән kабатлатыу кеүек алымдарҙы kулланырға мөмкин.

*4. «Башkортостан укытыусыһы» журналдарына баҫылған дәрес план-конспекттарына күҙәтеүгә бәйле кәңәштәр.*

Дәрес план-конспектын ентекләп укып сығығыҙ. Авторын, дәрес исемен, төрөн яҙып kуйығыҙ.

Укытыусы дәрескә ниндәй бурыстар kуйған?

Дәрес төҙөлөшө ниндәй? Дәфтәрегеҙгә планын яҙығыҙ.

Ҡайһы өлөшөндә тасуири укыуға әҙерлек ойошторола? Эштең барышын kылыkһырлағыҙ. Укытыусы ниндәй алымдар, методтар, эш төрҙәре kуллана? Ниндәй яңылыkтар белдегеҙ? Дәрестең отошло яktарын күрһәтегеҙ. Тасуири укырға өйрәтеү эше дәрестең бурыстарын тормошkа ашырыуға булышлыk итәме?

*Тасуири укыу буйынса әҙәбиәт исемлеге:*

1. Аслаев Т.К. Башланғыс мәктәптә укыу методикаһы. Өфө, әүҙ0.

2. Аслаев Т.Х., Һунаршин С.F. Башланғыс мәктәптә тасуири укырға һәм һөйләргә өйрәтеү. Өфө, 1973.

3. Абуталипова Р.Ә. Башланғыс мәктәптә башkорт телен һәм әҙәбиәтен укытыу методикаһыҠ Методик комплекс: 3 кисәктән. - II киҫәк «Практикум». - СтәрлетамаkҠ СДПА, - 134 бит.

Әҙәбиәт


1. Абуталипова Р.Ә. Башланғыс мәктәптә башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы: Методик комплекс: 3 кисәктән. - II киҫәк «Практикум». - Стәрлетамаҡ: СДПА, 2006. - 134 бит.

2. Арцев М.Н. Учебно исследовательская работа учащихся. Методические рекомендации // Завуч – 2005-№6 – с.4.

3. Аслаев Т.К. Башланғыс мәктәптә уҡыу методикаһы. Өфө, 1980.

4. Аслаев Т.Х., Һунаршин С.Ғ. Башланғыс мәктәптә тасуири уҡырға һәм һөйләргә өйрәтеү. Өфө, 1973.

5. Байсыуаҡова Ә. Терәк конспекттар. - тел
. Б.-.46.

12. Кузбеков Ф. Информационная технология при изучении башкирского языка.// Башҡортостан уҡытыусыһы.- 2007.-3.-с.3.

13. Полат Е.С. Методика проектов на уроках иностранного языка // Ин.яз в школе. - 2000. - № -с.3. дәрестәрендә // Б.У. - 1998. - № 5. - 32 – се б.

6. Бикҡужина Т.Ә., Ғафаров Б.Б. Әҙәбиәт дәрестәрендә картиналар файҙаланыу IV – VII кластар): Уҡыу ҡулланмаһы. - СДПИ, 1992, - 88 б.

7. Борикова Л.В. Виноградова Н.А. Пишем реферат, доклад, в КР: Учебное пособие для студентов. - М.:. Изда.центр «Академия», 2000 – 128 с.

8. Ғафаров Б.Б. Әҙәбиәттән яҙма эштәр. Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1999. - 208 бит.

9. Мусина Г. Терәк таблицалардан файдаланыйҡ. // Мәғариф. - 2002. - № 11. - 11 се б.

10. Сигал Т.К. Работа сопорными конспектами на уроках английского языка // И в школе. - 2008. - №1 – с 44.

11. Зәйнуллина Р.В. Әҙәбиәт дәрестәрендә мәғлүмәтле технологиялар. // Башҡортостан уҡытыусыһы. - 2008

14. Педагогические технологии: Учебное пособие для студентов педагогических специальностей под общей редакцией В.С. Кукушина. - М.: ИКЦ «Мар»,2006. - 33 с.

15. Протасеня Е.П., Компьютерное обучение: за и против// Иностранные языки в школе.- 1997.- с.3.3.

16. Сәмиғуллин Г., Баһавиев. Уҡыусыларҙың проект эше белән идарә итеү. // Фән һәм мәктәп. - 2005. - №3. - 26-сы бит.

17. Фәхрисламова Ғ.И. Дәрестә мәғлүмәти технологияларҙы ҡулланыу.// Башҡортостан уҡытыусыһы.-2008.- Б.29.